*Таңсулпан* **ҒАРИПОВА**

# “Мин ҡалдырған эҙ”

Очерк

*Хоҙай, ахыры, һине шулай*
*Һоҡланһындар өсөн яратҡан.*
*Яратҡан да,*
*Ситтән ҡарап тороп,*
*Һоҡланъандыр үҙе аҙаҡтан.*
*Рафаэль Сафин*

**Тәбиғәттең уяу бер мәлендә...**

Тулғаҡ оҙаҡҡа һуҙылды. Хәсбиямал, ауыртыуҙары ебәреп торған арала, балалары Рима менән Миңфәрә өсөн хафаланды: иртән иртүк, әсәләре ауырый башлағас уҡ, уйнап килегеҙ, тигән булып, урамға сығарҙылар. Асығып йөрөйҙәрме икән? Алағар ваҡыты — өшөмәһәләр ярай ҙа... Ҡәйнәһе, усаҡ аҫтына ут яғып, һыуҙы йылы тоторға тырыша. Үҙе әленән-әле уфтана. Сырайы борсоулы, ирендәре ҡымтылған. Кендек әбейе Гөлһылыу инде әллә нисә тапҡыр тышҡа тәһәрәткә сығып әйләнде, мәгәр өйҙән бала илаған тауыш сыҡмай...

*Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова*



— Эй-й-й... Кемдә — баш ҡайғыһы, кемдә...

— Ни булды? — Хәсбиямал ыңғырашыу ҡатыш кендек әбейенә өндәште. — Кемде әйтәһең?

— Кемде булһын... Иреңде, Сабитыңды...

— Ул... өйҙәме ни?

— Аласыҡта...

— Төшкөгә ҡайтты ламы икән? — Хәсбиямалдың йөрәге һулҡылданы — ремонт ваҡыты бит. Ире Сабит менән Хәсбиямал икеһе бер тракторҙа эшләй. Алмашлап. Сабитын һуғышҡа алып киткәстәре, РТС-тағы трактор курсын йәһәт кенә тамамлап, техникаға үҙе ултырғайны Хәсбиямал, шунан бирле бергәләр...

Балалар тыуғанда ғына туҡтай Хәсбиямал эштән.

— Ҡәйнәм Сабиттың тамағына ашаттымы икән?

— Эй-й-й, Хәсбиямал! Иреңә чуртым булһынмы? Үҙеңде уйла! Ҡороға ҡалып киттең бына! Имен-һау башыңдан башҡа булыуыңды ҡайғырт! Ир ҡайғыһы — итәктә!

— Ҡуйсы, әбей, улай... Ы-ы-ыһ! — Хәсбиямал ауыртыныуҙан бөгәрләнә, тағы яҙыла. Тулғаҡ туҡтаған арала зиһене йәнә яҡтыра.

Хәсбиямал мәктәптә генә түгел, районда беренсе уҡыусы һаналды. Уҡыу барышында районнан килгән инспекторҙар ҡыҙыҡайҙың математика буйынса һәләтен күреп, иҫтәре китә ине. Феноменаль хәтер, аналитик аҡыл, тимер логика — ябай ауыл ҡыҙында был сифаттар ҡайҙан? Сираттағы олимпиаданан һуң уға районнан килгән түрәләр күн портфель тотторалар: “Артабан уҡы! Бындай портфель районның беренсе түрәһендә лә, һиндә”. Етенсене ул шул портфель менән мәктәпкә йөрөп, тик “5”легә тамамланы, ләкин уҡыуҙы дауам итеү тураһында ғаиләлә хатта ауыҙ асҡан кеше булманы: балалар күмәк, тормош ауыр. Ир бала булһа, эшкә сығыр ине колхозға, ә ҡыҙ бала? Билдәле, кейәүгә. Һоратыусыһы ла табылып тора: гармунсы Сабит. Ауылда шундуҡ һүҙ тарала:

— Хөмәйрә ҡыҙын теге Бөрйән Сабитҡа бирә икән, гармунсыға.

— Хөмәйрә ҡыҙы Хәсбиямал? Ул бигерәк йәш түгелме?

— Ун биш — нишләп йәш булһын?

— Ҡыҙыу халыҡ инде Моратовтар... Бөрйәндән бит улар... башҡорттар, — тип фекер йөрөтә бәғзе берәүҙәр.

— Башҡорт булһа ни... башҡортҡа бер Хәсбиямал сығамы?

Башҡорт, типтәр этностары әллә ни ҡушылып өлгөрмәгән, Илтабан исемле типтәр ауылы Сабит менән Хәсбиямалдың өйләнешеүе арҡаһында бер аҙ тулҡынланып, тарихи тамырҙарын байҡашып алды ла тынды. Йәштәр өйләнешеп күп тә йәшәмәне — һуғыш сыҡты. Сабитына йәшләй эҫенеп, яратып өлгөргән Хәсбиямал бик юҡһынды, хаттар яҙҙы, тыны менән тартып алырҙай булып, Еңеү көнөн — Сабиттың ҡайтыуын көттө. Ҡайтты Сабит.

1946 йылда Римаһы, тағы ике йылдан Миңфәрәләре донъя күрҙе. Ҡәйнәһе, ҡайныһы ейәнсәрҙәре өсөн өҙөлөп тора. Икәүләп эшләнеләр. Ауылда төп эш көсө — һаман ҡатын-ҡыҙ. Һуғыштан утығып, ир ҡорона инеп ҡайтҡан Сабиты улар араһында йөҙөк ҡашы кеүек, кис булһа, “Казанка“ гармунын алып, клубҡа китә. Китмәҫ ине — саҡыралар. “Марш” уйнаһындармы, бейеһендәрме — уртала — Сабит. Тол ҡатындар күп. Кейәүгә сыға алмай ултырып ҡалған ҡарт ҡыҙҙар ҙа етерлек. Хәсбиямал эштә бик арый. Өйгә ҡайтһа — хужалыҡ, йәш балалар. Арып, арманһыҙ булып мендәргә башы тейер-теймәҫтән йоҡлап китә. Таң менән торорға, эш, эш, эш... Ошондай арып-талып йоҡлап киткән сағында төн уртаһында ҡапыл уянып китте бер көн. Уянды ла аптыраны: эргәһендә Сабиты юҡ. Йүгереп тышҡа сыҡты — күренмәй. Гармун! Гармун да юҡ.

— Ах, һин әле шулаймы? — Төнгөлөккә тышап ырҙын артына ебәрелгән атты тотоп, йүгәнләп, һыбай менеп, Хәсбиямал күрше Юлдаш ауылына сапты. Сыбыртҡыһы менән ярһып килеп ингән ҡатынын күреп, Сабит ҡаушай төштө. Гармунын ҡосаҡлап, тиҙ генә атҡа менеп ултырҙы. Икеһе бер атты менгәшеп ҡайттылар. Ул саҡта шулай булды, ләкин...

Тағы тулғаҡ бөрөп алды, тын да алдырмай.

— Эстән бөгөләһең, малай булырмы икән? — Кендек әбейе ҡулын йыуа башланы.

— Ы-ы-ыһ... Малай булһа, билдән тота, ти ине ҡәйнәм.

— Ҡәйнәң әйтер ҙә ул...

— Сабит малай көтә бит, әбей!..

— Эй балам! Шуға иртәнән бирле йәнем ҡарайып йөрөйөм. “Ҡыҙ тапһа, мин Фәимәгә өйләнәм!” — тип ултыра ирең. Ә һин Сабит та Сабит...

— Фәимәгә?! Ул бит... Исеме сыҡҡан ҡатын... бер түгел, дүрт иргә барҙы...

— Ирҙәргә шундайҙар оҡшай. Улар иргә ярай белә. Миргә яраған иргә лә ярай бит ул.

— Ҡуй, әбей, булмаç... Кеше һүҙе...

— Ышанмаһаң, сыҡ та ҡара: Фәимә — аласыҡта, Сабитың менән бал эсәләр.

— Ә-бе-е-е-й! — Хәсбиямалдың ауыртыныуҙан донъя ярып ҡысҡырған тауышын йәш баланың илап үҙенең барлығын донъяға белгертеү ауазы еңде.

— Кем? Әбей, әйт, зинһар, кем?!

— Эй, балам! Сабыйҙың ҡыҙ йә малай булыуы мөһим түгел бит. Кеше булһын — бына нимә мөһим.

Ул арала итәк-еңен һыҙғанып, ҡәйнәһе Ғәйникамал килеп инде:

— Кем? Кеме бар килендең?

— Ҡыҙың бар, Ғәйникамал, һөйөнсө! Ейәнсәрең...

Ғәйникамал асҡан ауыҙын йәһәт кенә яулыҡ осо менән ҡапланы: “Бөттө! Былай булғас, Сабит китте!”

Күп тә үтмәй, бешеренеп, күстәнәстәре менән Хәсбиямалдың әсәһе Хөмәйрә килде.

— Гөлдәр тип ҡушам исемде ейәнсәремә, — тине ул ҡуйы һарғылт сәсле, күгелйем күҙле сабыйға яратып ҡарап, — Собханалла-машалла, йөҙө әлүктән нурланып тора! Гөл кеүек кенә бит!..

Кемгә — һөйөнөс, кемгә көйөнөс. Сабитты әйтерһең дә алыштырҙылар: йорттан тыныслыҡ китте. Хәсбиямалға, ике айлыҡ ҡыҙғынаһы Гөлдәрен күтәреп, әсә-атаһы йортона ҡайтып китеүҙән башҡа әмәл ҡалманы. Ә Рима менән Миңфәрәне ире Сабит үҙенә алып ҡалды. Фәимә шулай ҡуша икән. Йәнәһе, алиментты әҙерәк түләй. Асыуланғандан хасланған яман, тиҙәр бит. Тормоштоң этлеген күп күреүҙән шымарған Фәимә яңы иренә, Сабитҡа, сарт йәбешә: “Гөлдәрҙән баш тарт, үҙ фамилияңа яҙҙырма!” — ти. Яңы йәр ҡуйынында ихтыяры ереп-ебегән ир, ауыл Советына барып, ҡыҙынан баш тарта. Әммә бөтәһен дә аңлап, күреп-белеп торған ауыл халҡы Хәсбиямал яғын ала, уны яҡлай. Ауыл Советында Сабитҡа белдермәй генә ҡыҙға таныҡлыҡты “Моратова Гөлдәр Сабит ҡыҙы” тип яҙып бирәләр.

## Тормош — мәңгелек алыш

*Беҙҙең быуын кешеләренең иң бөйөк асышы шул:*
*бәндә үҙенең һәүетемсә фекерләү рәүешен үҙгәртеп,*
*тормош-көнкүрешен тамырынан үҙгәртеүгә ирешә ала.*
*Уильям Джеймс*

Моратова Гөлдәр Сабит ҡыҙына өләсәһе менән олатаһы йортондағы тормош еңелдән булмай. Эйе, өләсәһе Хөмәйрә уны ярата. Яратмаçлыҡ та түгел: теремек, матур бала Гөлдәр. Әммә ләкин өйҙә килен дә бар, уның үҙ балаһы. Ҡүмәк ғаилә өҫтөнә, сүп өҫтөнә — сүмәлә, тигәндәй, Хәсбиямал, бала күтәреп, иренән айы-

рылып ҡайтып төштө. Ҡескенә ауыл өйө тағы нығыраҡ тығыҙайҙы, кис булһа, баш терәр урын юҡ. Хәсбиямалға наҙланып ятыу ҡайҙа — шундуҡ колхозға эшкә сыға. Иҫәпсе, ырҙын мөдире — тағы әллә күпме вазифа. Тартҡан атты егәләр — башы эшләй бит Хәсбиямалдың. Йөрәгендә ут янһа ла, кешегә белдермәҫкә тырыша. Ҡәйнәһе йортонда, хәҙер инде үгәй әсә ҡулына ҡарап ҡалған ике ҡыҙғынаһы үҙәген өҙә. Сабитын да һағына: ир бирмәк — йән бирмәк. Эштән саҡ бушанымы — күңелен һағыш биләй, ул һағыш Хәсбиямал йөрәгенән:

Таң атҡанда, һаубуллашҡан саҡта,
Ҡулдарымды ҡуям ҡулыңа.
Һин хәтерлә ошо минуттарҙы,
Шул хистәрҙе ал һин юлыңа, —

тигән йыр һүҙҙәре булып урғыла. Эйе, ул йырлар, Сабиты гармунда уйнар ине. Йәш инеләр, бәхетле, мөхәббәтле инеләр. Ниңә шулай барыһы ла ҡапыл селпәрәмә килде? Хәсбиямалдың ире ҡаршыһындағы берҙән-бер ғәйебе — тағы, өсөнсөгә, ҡыҙ бала табыуы. Ә һуң Хоҙайҙың ҡушыуын бәндә үҙгәртә аламы? Етмәһә, кистәрен Фәимә үҙе кеүек ҡыҙмаса әхирәттәре менән Хәсбиямал тәҙрәһе эргәһенән төртмә таҡмаҡтар әйтеп үтергә әүәҫләнде. Ул таҡмаҡтарҙа Хәсбиямалды кәмһетеү ҙә, уның депутат булыуынан көлөү ҙә сағыла:

Ҡулымдағы балдағымдың
Исеме — Миҙәтғәли.
Депутатҡа ир нимәгә —
Мандатыңды ҡос, Хәсби!

Яңғыҙ ҡатындың төндәре былай ҙа ҡараңғы, ә былар... Хәсбиямал, йөрәгенә сыҙай алмай, ҡараңғыла һәрмәнеп, тупһаға сығып ултыра, тегеләр алыҫлашҡан, әммә таҡмаҡтары һил төндә айырым-асыҡ ишетелә:

Ағын кей, күген кей,
Булһа, йәшелен дә кей!
Өс балаһын өс мөйөшкә
Ҡаратып булһа ла һөй!

Уйлана Хәсбиямал, моңлана, хәсрәтләнә. Өҫтәүенә килене күҙенең ағы менән ҡарай: артыҡ тамаҡ, артыҡ баш улар бында. Хәсбиямал эшләй ҙә бит, баланы күпһенәләр. Эйе, ошо бала Хәсбиямалдың тормошон аҫтын өҫкә әйләндерҙе. Гөлдәр! Ул ғәйепле. Уның арҡаһында тегендә ике ҡыҙы үгәй әсә ҡулында интегә. Хәсбиямал әсәһенә ҡайтып китергә булғас, Рима менән Миңфәрә лә йыйына башланы ул саҡта:

— Инәй ҡайтҡас, беҙ ҙә ҡалмайбыҙ! — тинеләр. Нисәмә тапҡыр килеп ҡаранылар, Хәсбиямал уларҙы, йөрәк майын һыҙылдырып, кире ҡыуҙы. Сараһыҙлыҡ. Хатта атаһы фамилияһын биреүгә ҡаршы был балаға. Бына шулай беренән-бере күңелһеҙ уйҙар солғанышында интегә әсә. Әле бала быуылаһығыла илай, ә Хәсбиямалға эшкә киткәнсе һыуға барып килергә кәрәк. Ауырлы килене һыуға үҙе сығып китһә, өйҙә дауыл ҡубасаҡ! Сабый асырғанып илай. Хәсбиямал биҙрәләрен көйәнтәһенә элде: “Эй! Дөмөкһәң, дөмөк тә ҡуй!” Һәм ул, яҙмышының үсен баланан алғандай, йүгерә-атлай Яйыҡҡа китте.

Яйыҡҡа барып еткәс, ҡапыл йөрәген ниҙер көйҙөрөп алғандай булды. Йә Хоҙай! Ул, күнәктәрен, көйәнтәһен ташлап, кире ауылға йүгерҙе: “Ғәфү ит, Хоҙайым, әлләниндәй көфөр уйҙар уйланым! Бала ғәйепле түгел бит беҙҙең тормоштоң емерелеүендә!” Ҡайтып инһә, ни аҙаптандыр бала йөҙтүбән ята. Мендәр менән томаланып үлмәҫ өсөн башын күтәрергә тырыша, яҫтыҡ лысма

һыу, үҙе күгәргән. Тағы бер йә ике минут һәм сабый һулыш алыуҙан туҡтар ине. Үлем менән йәнтәслимгә көрәшкән ике ай ярымлыҡ сабыйын күкрәгенә ҡыҫа әсә: “Йәшә, Гөлдәрем, йәшә, балаҡайым!..”

Үлемдең эргәлә генә икәнен бөтә йәне-тәне, күҙәнәктәре менән тойоп өлгөргән балала, күрәһең, үҙен һаҡлау инстинкты бик иртә уяна: өс айында сабый, сәңгелдәктең бауына тотоноп, аяғөҫтө баҫа, дүрт айында ултыра, ете айында ҡапыл тора ла йүгерә. Эйе, атлап тормаҫтан йүгерә. Тормош тигән күп ҡырлы, ҡатмарлы һәм ҡыҙыҡлы күренешкә Гөлдәр бынай шулай йүгереп килеп инә.

Әммә Гөлдәрҙең фәрештәләре йәнә бер тапҡыр уны әжәлдән ҡурсып алып ҡала. Ағаһы Гөлдәрҙе ер һөрөп йөрөгән Хәсбиямал апайына имеҙергә алып килә. Трактор баҫыуҙың теге осонда булғас, сабыйҙы ҡапылда һалам араһына һала һәм, өшөмәһен тип, һалам менән күмә. Үҙе йомош менән ситкә китә. Бына Хәсбиямал тракторы менән килә — алда һалам өйөмө. Инде өйөмгә килеп мендем тигәндә, ҡапыл йөрәге сәнсә, тормозға баҫа. Һәм бала тауышын ишетә.

Тракторҙан һикереп төшөп, тауыш эйәһенә яҡынлай, өйөлгән һалам эсендә сабыйы — Гөлдәре.

— Ғүмерең оҙон булыр, — ти Хәсбиямал, сабыйын күкрәгенә ҡыҫып. — Донъяға тыуғаныңа ике-өс ай үттеме-юҡмы, ә һин ике үлемдән ҡалдың.

Йәшәү — көрәш, тормош — алыш — Гөлдәр был хәҡиҡәтте биләүҙә үк үҙләштерә.

## “Был — минең ер!”

*Кешенең холҡон тынлыҡ һәм торъонлоҡ формалаштыра алмай.*
*Һынауҙар, кәртәләр, ъазаптар рухты нығыта, сыныҡтыра,*
*илһамландыра һәм уңышҡа илтә.*
*Хелен Келлер*

Тормош әкренләп дауам итә. Апайҙары — атаһы йортонда, Гөлдәр — әсәһе менән. Рима менән Миңфәрә, әлбиттә, әсәләре янына килештереп йөрөйҙәр. Ләкин оҙаҡҡа түгел: еңгәй өсөн бер Гөлдәр башынан ашҡан! Ҡыҙыҡайҙың саҡ ҡына ҡырын баҫҡанын һағалап, төймәне — дөйә, берҙе — биш итеп ире Хәкимгә ошаҡларға ғына тора килен кеше. Был тормош Хәсбиямалдың да тамам елегенә үткән — үртәнеүҙәренең, янып-көйөүҙәренең көсөн Гөлдәргә төшөргөләй. Сөнки эштән арып, арманһыҙ булып ҡайтыуына уны килендәренең емерек йөҙө, бер һүҙе ҡаршы ала:

— Гөлдәрең иҙәнде тапаны!

— Гөлдәрең, Гөлдәрең, Гөлдәрең...

Өләсәһе Хөмәйрә генә яҡлай кескәй ҡыҙҙы. Атаһының әсәһе Ғәйникамал да Гөлдәрҙе яҡынайтырға тырыша ла бит, Фәимә килененән ҡурҡа. Шулай ҙа Сабитының үҙенә генә оҡшап торған һары сәсле, зәңгәрһыу күҙле, теремек ҡыҙҙы яҡын күрә ул. Бер тапҡыр Гөлдәрҙе йәлләп, өйөнә саҡырып индерә, йәһәт кенә банкаға һөт һөҙөп бирә:

— Эсә һал, һыйырығыҙ һыуалған бит... Асҡаҡһып йөрөйһөңдөр.

Гөлдәр тәҙрәнән йүгереп инеп килгән Фәимә һынын күреп ҡала ла һөттө йәнтәслимгә эсергә тырыша, ләкин өлгөрә алмай: үгәй әсә килеп тә инә — банка бер яҡҡа, Гөлдәр икенсе яҡҡа оса. Осора һуғыу аҙ күренә үгәй әсәгә — ҡыҙыҡайҙың артына тибеп ебәрә — әллә ҡайҙа соланға ҡаҡлығып барып төшә сабый. Сатанлап, илай-илай өйөнә табан йүгерә Гөлдәр. Ул өлкән апайҙарҙың:

Ағас тирмән ауыр була,
Беләккәйҙе талдыра,
Ата йорто яҡын була —
Йөрәккәйҙе яндыра, —

тип йырлағандарын ишеткәне бар. Ул нишләп яҡын булһын инде ата йорто? Берҙән-бер инде — унда ла туҡмалып сыҡты. Әлбиттә, Хөмәйрә өләсәһе йәшәгән өйҙә лә ул үҙенең артыҡ икәнен тоя. Туҡмаҡ та эләгә. Бәлки, бәләкәй кешеләрҙең бөтәһенә лә ныҡ ҡыйындыр ул? Әсәһе апайҙарын йәлләп илай, тимәк, уларға ла ҡыйын? Апайҙары менән бергә йәшәһә, күмәк булып алһалар, бәлки, еңеләйер ине хәлдәре, улар ҙа, Гөлдәр ҙә иламаҫ ине.

Шулай бер көн урамда уйнап йөрөгәнендә Гөлдәр Рима, Миңфәрә апайҙарының фотоға төшөргә йөрөгәндәрен күреп ҡалды. “Ауылға фотограф килгән!” Был яңылыҡ Гөлдәрҙе лә ашҡындырып, күңелен тулҡынландырып ебәргәйне. Ә бында... ана ғына, бар ҙа яндарына баҫ. Һәм Гөлдәр шулай итә лә.

Шулай итеп, ул үҙенең донъяла дүрт йыл йәшәү дәүерендә беренсе тапҡыр фотоаппарат объективына эләгә.

Башына уй ҙа төшә Гөлдәрҙең: әҙәмдәр менән тиң булыр өсөн көлтә сәсле (ҡуйы һары сәстәре өсөн уға “Ҡолтә” тигән ҡушамат бирәләр) булыу ғына аҙ икән — баҡһаң, уға матур шәл, туфлиҙар кәрәк. Әмәлгә ҡалғандай, магазинға шәл килә. Гөлдәр барып ҡарай ҙа ҡайта, ҡарай ҙа ҡайта. Инде бер генә бөртөк ҡалды шул шәл.

— Инәй...

— Әйттем бит: аҡса юҡ!

— Ә ҡасан... була?

— Атайыңдан ике ай алимент юҡ!

Гөлдәр атаһынан ай һайын биш һум алимент ала ине, әле ул да юҡ икән...

— Ә шәл бөтөп ҡуйһа?

— Бөтһә, яңынан килер...

Гөлдәргә магазинға ҡасан да булһа киләсәк түгел, әле ятҡан шул шәл кәрәк! Зәңгәр шәл. Ул шундай матур! Гөлдәр уны ябынып алһа, бер кем дә, яланбашһың, тип кәмһетмәҫ ине.

— Алиментҡа аҡсаны атайға кем бирә?

— Бухгалтерия. Ҡолхоз.

...Китә Гөлдәр. Ҡолхоз идараһы бухгалтерияһына көн дә бара.

— Ни йомош? — тип һорайҙар унан.

— Аҡса кәрәк. Атайым бирә торған аҡса.

— Уны нимә итәһең?

— Шәл алам...

*Рима, Гөлдәр һәм Миңфәрә (һулдан уңға)*



Тамам быуындарына төшә Гөлдәр бухгалтерияла эшләгәндәрҙең. Инде уны тәҙрәнән күрһәләр:

— Көлтә килә! Көлтә тағы килә! — тип тыныслығын юя башлайҙар.

Ала Гөлдәр шәлде.

Бер көндө әсәһе:

— Гөлдәр, беҙ күсенәбеҙ, — ти.

— Ҡайҙа?

— Атайың өйөнә.

— Ә Фәимә? — ти ҙә Гөлдәр тотлоға. Сөнки яңыраҡ ҡына үҙенең Фәимә менән осрашҡанын һәм ниҙәр булғанын әсәһе белмәй ине.

Ә был шулай була. Гөлдәр ҡыҙҙар менән тупраҡтан тауҙар өйөп, тауҙар араһынан юл һалып уйнап ултыра. Ҡараһа, биҙрәләр көйәнтәләп Фәимә килә. “Ах! Бына ҡасан юлдар осрашты!” — ул һеләүһен тиҙлеге менән һикереп тора ла Фәимәнең ике күҙенә берәр ус тупраҡ ташлай:

— Быныһы — һөт өсөн!

— Быныһы — беҙҙе етем иткәнең өсөн!

Күнәктәрен ташлап, баҫтыра ҡыҙҙы Фәимә — елде тотоп буламы?! Хәҙер шул Фәимә йәшәгән йортҡа йәшәргә барырғамы?

— Унда Фәимә бар...

— Фәимә ҡайтҡан.

— Ҡайҙа?

— Үҙҙәренә... үҙенең өйөнә. Инде апайҙарыңдан айырылмаҫһың, гел бергә булырһығыҙ...

Ҡыҙҙарын йәлләптер инде, әсәһе күҙен һөртә, ә Гөлдәрҙең күҙ алдына теге һөт эсергә ингән саҡта күргән йәшел гармун килә. Был ҡорамалдың ҡөҙрәтен белә Гөлдәр! Телдәренә баҫһаң, ул йырлай, моңлана, әллә ниндәй ҡөҙрәтле ауаздар сығара. Әгәр Гөлдәр атаһы йортонда йәшәһә... ул гармунды тотоп ҡарай, хатта телдәренә баҫып ҡарай ала бит! Гөлдәр аллы-гөллө хискә сума. Тик әсәһенең биш йыл айырылышып торғандан һуң, сабыйын күтәреп, бер саҡ ҡыуылып сыҡҡан өйҙөң ишеген ҡабат асырға ҡарар итеүенең сәбәптәрен генә белмәй. Аҙаҡ, йылдар үткәс кенә төшөнөр ул был хәлдең серҙәрен. “Бала — бауыр ите. Шул Рима менән Миңфәрәмде йәлләнем. Сабит ер һөрә ине. Мин иҫәпсе. Көн дә һөргән ерен ҡабул итеп алырға ҡырға барам. Минең барғанымды белгәс, Фәимә көҙҙөң ҡара һыуығында ике ҡыҙымды арбаға ултыртҡан да килгән баҫыуға. Асы ел үҙәккә үтә. Үҙе кейенгән, ә балалар — яланғас. Ялан тәпәйҙәре күгәреп туңған. Ҡар күҙҙәре төшә. Фәимәне бәреп осорғанымды үҙем дә һиҙмәй ҡалдым.

— Сабит, — тим, — йөрәгең юҡтыр һинең!

— Йөрәгең булғас, ҡайт та йәшә, — ти Сабиты. — Мин бит һине күптән саҡырам.

Шулай ҡабат берегәләр. Фәимә Сабиттан ике бала табып өлгөргән була. Донъя — ҡуласа, — был юлы ул, Фәимә, ике ҡыҙ балаһын күтәреп, әсәһе йортона ҡайтып китә.

Атаһы, апайҙары менән бергә йәшәп китеү, ай-һай, еңел булмай Гөлдәргә. Төрлөсә шарттарҙа формалашҡан төрлө холоҡ, төрлө ҡараш, төрлө мөнәсәбәт. Етмәһә, Гөлдәр яңы аймаҡҡа күсте. Һәр аймаҡтың үҙ законы. Гөлдәрҙең, ата йортона күскәс, беренсе ҡайғыһы теге йәшел гармунды юғалтыуы булды. Инде телдәренә баҫа, шул телдәр: “Ал таң ата, Сулпан ҡалҡа”, тип, әсәһе тауышы менән көйләй ҙә башлағайны.

Әсәһе “Теге саҡтағы хатамды ҡабатламайым, Сабитты гармун күтәртеп клубта йөрөтөп ҡуймайым”, типтер инде, “Ҡазанка”ны һатып ебәрҙе. Илай Гөлдәр. Иҙәндә тәгәрәп йөрөп, башын ишек тупһаһына бәргесләп-бәргесләп илай. Донъялағы иң ҡәҙерле нәмәһен юғалтты бит! Гармун уның өсөн “нәмә” генә түгел — хыял! Эйе, хыял! Уның хыялын һаттылар, өмөтөнән яҙҙырҙылар!

Гөлдәрҙе йыуатыр өсөндөр инде, уға йоморо цигейка бүрек һатып алып бирәләр. Заманы өсөн бындай бүрек тиңе булмаған бүләк була ла бит — Гөлдәр уны атып ҡына бәрә.

— Мин үҙем алам гармунды! Аласаҡмын! Минең гармуным буласаҡ! Бына күрерһегеҙ! — ти ул сарғаланып.

Донъя күҙ йәштәренә ҡарамай: илаһаң, иламаһаң да, Ер Ҡояш тирәләй әйләнә. Тәүлекте тәүлек алмаштыра. Тормоштоң үҙ ҡанундары, үҙ мәшәҡәттәре. Ауыл балаһының һәр көнө эш менән үтә. Ҙурмы һин, бәләкәйме — һәр кемдең үҙ бурысы, үҙ йөкләмәһе. Ҡаҙҙар бәпкә сығарыу менән Гөлдәр ҙә мәшәҡәткә сумды: бәпкә көтөү — уның елкәһендә. Үҙенә ҡушылған эшкә яуаплылыҡ тойғоһо көслө ҡыҙ был бурысты етди ҡабул итә. Бәпкә үҫһен өсөн ашарға тейеш. Ашар өсөн һутлы үлән кәрәк. Гөлдәр ситәүкәгә бәпкәләрҙе тултыра ла өй артындағы сирәмгә сыға. Бәй, бәпкәләрҙе ебәреүе була, күрше ҡыҙҙар алдына килеп баҫа: “Был — беҙҙең ер!” Бер, ике, өс көн шулай итә былар. Гөлдәрҙең бәпкәләрен ситәүкәгә тултыралар ҙа, текмә буйына күсерәләр, ә унда үлән юҡ. Әсәһенә, йә өләсәһенә әйтер ине — Гөлдәр ошаҡлашып өйрәнмәгән. Еңгәһе менән йәшәгән саҡтарында ошаҡлашһа, көн һайын түгел, сәғәт һайын яу сығыр ине. Эйе, биш йәшендә ул бары үҙ көсөнә ышанырға өйрәнде. Дүртенсе көн. Ҡыҙҙар йәнә сыҡты: “Был — беҙҙең ер!” Гөлдәр бәпкәләрен был юлы ситәүкәгә үҙе тултырҙы, урам эсенә индереп ултыртты. Шунан сыҡты. Үҙенән байтаҡҡа оло ҡыҙҙарға һуғыш асты. Башта ҡаршы тороп маташтылар, аҙаҡ еңелделәр. Бәпкәләрен ситәүкәгә тултырып, арттарына ҡарамай ҡастылар. Гөлдәр бәпкәләрен сығарҙы. Себекәйҙәр йәшел, һутлы үләнде кинәнеп йолҡалар, муйындарын һуҙып, апайҙарына рәхмәт әйткән кеүектәр. Дөрөҫ, ҡыҙҙар әсәләренә ошаҡланы, Гөлдәр танманы:

— Үҙҙәре башланы, — тине ул. — Бәпкә сығарһам, “Был беҙҙең ер!” ти ҙә торалар. Хәҙер был — минең ер!

## Хыял

*Кемдең хыялдары матурыраҡ —*
*киләсәк улар ҡулында.*
*Элеонора Рузвельт*

Ояла ни — осҡанда шул, ти халыҡ мәҡәле. Гөлдәр әсәһенең әсәһе, йәғни Хөмәйрә ҡартинәһе тәрбиәһендә үҫә. Әсәһе көнө буйы эштә. Баланың холҡо биш йәшкә формалашып бөтә, тиҙәр. Һәр хәлдә, атаһы йортона күскәнгә тиклем Гөлдәрҙә буласаҡ лидер һыҙаттары үҙен апаруҡ һиҙҙерә башлаған була. Кем һуң үҙе Хөмәйрә? Ҡартатаһы Сәғитйән кем? Башта әйтелгәнсә, Моратовтар Бөрйән яғынан күсеп килә. Ырыуҙары йә бөрйән, йә ҡыпсаҡ инде. Ҡыпсаҡ булыу ихтималы ҙурыраҡ, сөнки ҡыпсаҡтар, йәғни ҡоба (аҡ) сактар кеүек, аҡ йөҙлө, зәңгәрһыу күҙлеләр, холоҡтарында ҡыҙыулыҡ бар. Хөмәйрәнең иһә туған-ырыуы Әбйәлил яғына тоташа. Ырыуын юллаһаң, йә күбәләк, йә тиләүҙер. Эш унда ла түгел. Эш уларҙың бик эшсән, егәрле булыуҙарында. Хөмәйрә лә, Сәғитйән дә колхоз эшенә мөкиббән кешеләр була. ВДНХ-ға ла барып ҡайта ҡарт. “Кемегеҙ

булһа ла берегеҙ барығыҙ", — тип бирә уларға колхоз путевканы, Хөмәйрә: "Ир кеше һин бар, Сәғитйән, донъя күреп ҡайт", — ти.

Хөмәйрә үҙе иһә бик иртә тора. Ҡеше һыйырға торғанда уның иҙәне һап-һары итеп ҡырып йыуылған, сәйе ҡайнаған була. Иң беренселәрҙән булып һыйырын көтөүсегә ҡыуып килтерә лә, ауыл ситендәге тауға үрләй. Шул тау башында ултырып ҡояш ҡалҡҡанын, ауылдың, тереклектең уянғанын күҙәтә. Үҙе хатта ҡыш көнө лә камзул менән генә йөрөй, бик шәп атлай. Ҡамзул кеҫәһендә һәр саҡ Гөлдәргә тигән берәй күстәнәс йөрөтә. Йырҙар йырлай, таҡмаҡ күп белә. Бигерәк тә "Уйыл"ды ярата йырларға. Бәләкәйенән тилбер Гөлдәрҙе ҡартинәһенә оҡшата халыҡ. "Хөмәйрә ҡарсыҡ" тип йөрөтәләр уны. Йөҙ ҙә дүрт йәшендә иҫ-аҡылы теүәл көйө донъя ҡуя Хөмәйрә. Үҫә төшкәс, Гөлдәр унан оҙаҡ йәшәүенең серен һораны бер. "Бәхетте лә, һаулыҡты ла иртә менән өләшәләр, ҡыҙым. Мин иртә торҙом. Иртәнге саф һауаны һуланым. Көн дә "Ҡлуб тауы"на мендем", — була яуабы.

Гөлдәр ҙә бик иртә тора. Аталары йортонда көтөүҙе ул ҡыуа. Ысыҡ ярып барған эҙенән кире ауылына ҡайта. Тәүге эҙ — уныҡы! Тура итеп һалырға тырыша ул юлды. Берәй ере төҙ булмаһа, ҡайтҡанда сәбәбен асыҡларға тотона. "Мин ҡалдырған эҙ ниндәй?" Ошо һорауҙы ул үҙ-үҙенә көн дә бирә. Бына ошо Хөмәйрә ҡартинәһенән алған "багаж" менән ата йортонда, йәғни Ғәйникамал ҡартинәһе менән Хажмөхәмәт ҡартатаһы өйөндә йәшәп алып китә. Һуғыш яралары ғына түгел, йән яралары ла әкренләп бөтәшә.

Хәсбиямал Сабитының күптәнге хыялын, ниһайәт, тормошҡа ашыра: ул табып бирә. Түбәһе күккә тейгән Сабит Моратов Фәниленә (малайына шул исемде ҡуша) хромка гармун алып ебәрә! Шулай булмай, Хажмөхәмәт гармунсы, Сабит үҙе лә гармун тарта, тимәк, малайы ла гармунсы буласаҡ. Теге поэма геройы әйтмешләй:

Һунарсы ҡаны үҙемдә,  
Һунарсы булыр балам, —

тигән кеүек инде. Әлбиттә, гармун тигәс тә, әллә ҡайҙа китмәгән инде ул. Иҫкенең иҫкеһе. Фәнил гармунға үрелерлек булғансы әле!.. Гөлдәр гармундың уш та пыш

*Хәсбиямал һәм Сабит Моратовтар*



килгән тишектәрен ямап, тәүге көйҙө сығара. Көй сыға — шәп кенә уйнарлыҡ түгел шул. “Үҙемдең гармуным буласаҡ!”, — ти Гөлдәр. Йәй, каникул ваҡытында, 11 йәшлек Гөлдәр колхозға күбә арты тырматырға сыға. Нисек кенә тырышһа ла, гармун алырлыҡ аҡса эшләй алмай. Етмәһә, ғаилә һаман ишәйә: Фәнил артынан Гөлфирә, унан Ришат тыуа. Атаһы Фәимәнән тыуған ҡыҙҙарына алимент түләй. Шуға күрә Гөлдәр киләһе йәй колхозға быҙау ҡарарға сыға. Хөмәйрә ҡартинәһенән күрмәксе, бик иртә тора. Быҙауҙарҙы һалҡында — иртәнге һиллектә — ашатырға алып сыға. Көн ҡыҙғансы улар туйына, ә кис ҡараңғы төшкәнсе көтә. Ауырлыҡты шәп йыя безәүкәйҙәр. Хатта иң шәп быҙау ҡараусы тип, Гөлдәрҙе район гәзитенә маҡтап яҙалар. Был юлы Гөлдәрҙең аҡсаһы гармунға етә. Тырышҡан — тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан. Гөлдәр тәүге хыялын тормошҡа ашыра — гармун һатып ала. Өп-өр яңы гармун!

## “Һыу аҫтында ҡалды һуҡмаҡтарым...”

*Маҡсатыңа өлгәшеүҙең берҙән-бер юлы —*
*уға табан атлау.*
*Француз мәҡәле*

Бәндә теләй — Хоҙай бойора, ти. Гөлдәр Моратова үҙенең тыуған ауылы Илтабанды, үҙе йәшәгән урамды, инде эҫенеп, яратып киткән муйыл ҡыуаҡтары менән уратып алынған атаһы йортон нисек кенә яҡын күрһә лә, ауылды икенсе урынға күсерергә булалар. Ҡарар өҫтән килә, ҡарыулашып булмай. Әле ултырған ауыл урыны һыуһаҡлағыс аҫтында ҡаласаҡ. Ауылдан ун саҡрымдар самаһы урында ҡалҡып сыҡҡан Трестҡа (хәҙерге Учалы ҡалаһы. — ***Авт.***) һыу, бик күп һыу кәрәк буласаҡ, сөнки ҡала үҫә, үҫәсәк. Ә уның һыуға булған ихтыяжы көндән-көн арта. Үҙен ауылынан башҡа күҙ алдына ла килтерә алмаған тәбиғәт балаһы Гөлдәргә был хәбәр аяҙ көндә йәшен атҡан кеүек тәьҫир итә. Һәм ул эсендә урғыған хистәрҙе бушатырға гармун ғына етмәүен аңлай: ҡәләмгә тотона. “Һыу аҫтында ҡалды һуҡмаҡтарым”. Гөлдәрҙең тәүге ижад емеше — поэмаһы шулай башлана. Әйткәндәй, шиғриәт уның кәсебенә әүерелеп китмәһә лә, Гөлдәрҙе ул ғүмере буйына оҙатып йөрөйәсәк. Тормошоноң ҡырҡа боролош яһаған, күңеле тартылған керештәй нескәргән саҡтарында ул Шиғриәт ғали йәнәптәренә мөрәжәғәт итәсәк. Ә гармун... Эйе, был юлы ла һыу аҫтында ҡалған ауылын юғалтыу һағышын баҫыр өсөн йәнә гармун телдәренә текәлә, көй сығара. Гөлдәр бирешергә уйламаны . Гармунда уйнарға өйрәнде бит! Әсәһе ҡаршы ине, уйнатманы. Гөлдәр бер кем үтә алмаҫлыҡ кесерткән араһына инеп юғала. Гармун тауышын ишетеп, әсәһе эҙләргә сыҡһа, шыма. Йәшел кесерткән йәшел хромканы ла, көлтә сәсле ҡыҙыҡайҙы ла үҙ итте, ныҡлы йәшерҙе. Ләкин Гөлдәр хромканың мөмкинлектәре аҙ икәнен төшөндө. Шуға бит инде музыка грамотаһына өйрәнергә, унан... баян алырға хыяллана. Әмәлгә ҡалғандай, күрше Ҡунаҡбай ауылы мәктәбенә музыка буйынса грамотаһы булған Мәҙинә исемле ҡыҙ уҡытырға килә. Ҡунаҡбайға йөрөр өсөн велосипед кәрәк. Шунһыҙ булмай: юлды ла ҡыҫҡарта, ваҡытты ла бәрәкәтле итә. Гөлдәргә бер нәмә лә күктән төшмәй, бары тик үҙ көсөнә ышана ул. Әле лә, күп уйлап тормай, йәй ҡырға күскән һыйыр фермаһына дежур һауынсы булып эшкә сыҡты. Әлбиттә, ата-әсәһе өсөн уның йорт тирәһендә булыуы, ҡусты-һеңлеләрен ҡарашып, ҡул араһына инеүе мөһим. Ләкин... уның маҡсаты ул түгел! Музыка! Бары тик музыка биләй

уның күңелен. Еңел булмай Гөлдәргә йәй көнө, себен-серәкәй мәлендә һауынсы булып эшләү. Малдар ҙа, кешеләр кеүек, төрлө холоҡло, төрлө фиғелле. Яңы өйрәтелгән таналар тәжрибәле һауынсыларҙы ла сығырынан сығара. Ун биш йәшлек, талсыбыҡ кеүек нескә ҡыҙ сыҙамаҫ, күп булһа, бер-ике көн йөрөр, тип уйлайҙар. Юҡ! Ярты юлда сигенеү, ауырлыҡтан ҡурҡыу — Гөлдәр өсөн ят сифат. Ауыр булған һайын ул ныҡыраҡ серәшә. Ҡөстөң беләккә эш менән инеүен дә ул күптән төшөнгән. Атаһы, ҡыҙ бала — баламы ул, тип кәмһетмәһен, уның арҡаһында әсәһенә һүҙ теймәһен өсөн ул үҙ-үҙен белгәндән йорт-ҡура эшенә егелде. Атаһы салғыға үрелһә — салғы, балтаға үрелһә — балта тотто; атаһы бер бүрәнәнең башына йәбешһә, икенсе башын Гөлдәр күтәрҙе. Ҡыҙ бала малайҙарҙан кәм түгел, тигән сәм Гөлдәргә ныҡлыҡ бирҙе, оһолландырҙы. Әле лә, Гөлдәр фермаға һауынсы булып киткәс, ғаиләлә сәй артында ошондай һөйләшеү булып ала. “Сыҙамаҫ! — ти Сабит, бушаған сынаяғын Хәсбиямал яғына этәреберәк. — Быйыл йыл ямғырлы — себен-серәкәй шәп!” “Әллә..., — тип һүҙгә ҡушыла уларға килеп ингән Хәким ағаһы. — Һеҙҙең менән бергә йәшәгән саҡта, Хәсбиямал апай, ҡыҙыҡ бер хәл булды. Һин бит инде гел эштә. Гөлдәр — беҙҙең менән. Бигерәк тиктормаҫ, хәрәкәтсән ине бит сабый! Шул. Ҡамыт яһап ултырам. Гөлдәрҙән покой юҡ. Инмәгән тишеге, ҡыҫылмаған нәмәһе юҡ бит! “Ҡил әле, Гөлдәр, миңә ярҙам итеп кит әле”, — тим. Ҡилде был. Мин быны ауыҙына ҡамыт бауын тешләттем. Тик кенә тор, ысҡындырып ҡуйма, юғиһә, эште бөлдөрәһең. Тора был. Тирләне, ҡыҙарҙы, танауынан аға — ҡайышты ысҡындырмай. Шулай сәғәттән ашыу торҙо. Ахырҙа йәлләнем, ебәрҙем. Ә бит уға ул саҡта бары ике йәш ярым ғына ине...”

— Гөлдәргә килендән генә эләктеме, тиһәм, һин дә ҡоро ҡалмағанһың икән! — Хәсбиямал йәшкәҙәгән күҙҙәрен яулыҡ осо менән ҡоротто.

— Үткән эштән төш яҡшы, — Сабит үҙенең ауанлығы арҡаһында килеп тыуған ул үткән хәл-ваҡиғаларҙы хәтерләргә яратмай ине. — Әйҙә, ҡәйнеш, йыуасанан етеш!..

Алды велосипедты Гөлдәр. Мәҙинә апаһы педучилищела алған музыка һабаҡтарын да бик тиҙ үҙләштерҙе. Офоҡта — яңы хыял! Баянда уйнарға өйрәнеү! Уның өсөн Учалыға йөрөп, музыка мәктәбендә уҡырға кәрәк. Бында инде велосипед менән генә булмай: мотоцикл. Ул мотоцикл алырға тейеш!

Күп балалы колхозсы ғаиләһенә ҡайҙа инде ул мотоцикл алыу! Улай уйлаһаң, тормош мәшәҡәттәре бәндәнең хыялынан көслөрәк, маҡсатынан ҙурыраҡ булып сығамы? Ул ваҡытта инде өлкән апаһы Рима кейәүҙә, еҙнәһе Жәмил Треста (ҡалала) эшләй, үҙе лә гармунда һыҙҙыра. Гөлдәр уйҙарын еҙнәһенә һөйләй, кәңәш һорай. “Ярай, — ти Жәмил, — мин үҙем дә ваҡытында аҡса юҡлыҡтан музыкаль белем ала алмай ҡалдым бит. Әйҙә, мин кредитҡа мотоцикл алайым, яйлап түләрһегеҙ”. Һәм шулай итәләр ҙә: Гөлдәр Учалы музыка мәктәбе директоры Владимир Николаевич Латочкинға баян класы буйынса дәрестәргә йөрөй башлай. Зәңгәр төҫтәге “Ҡәзәкәй”, зәңгәр күҙле, ҡуйы һары сәсле, нәҙекәй ҡыҙҙы ултыртып, көн ашаһына ҡалаға елдерә.

Бына бер көн килеп Гөлдәр Моратова үҙе лә Илтабандан йөрөп уҡып, Ҡунаҡбай урта мәктәбен тамамлай. Уҡыу еңел бирелһә лә, барыһы ла шыма ғына булмай. Мәҫәлән, башҡорт балаһына башҡорт ауылында башҡорт мәктәбендә әсә телендә белем алыу — тәбиғи. Бында алыш та, тартыш та юҡ. Гөлдәрҙең хәл — икенсерәк. Ул үҙе башҡорт, типтәр ауылында тыуып-үҫкән, мәктәптә уҡыу-уҡытыу — татар телендә. Берәү булһа, күпселеккә буйһонор ҙа ҡул һелтәр

ине, тик Гөлдәр түгел! Дәрестә башҡорт телендә яуап бирә. Иншаларҙы... башҡорт телендә яҙа. Конфликт. Баш бирмәҫ Гөлдәргә эләгеп кенә тора — түҙә. Уйлап ҡараһаң, уҡыусының хоҡуҡҡынаһы!.. Мәктәп йылдары шыма үтмәһә лә, комсорг булып һайланып, коллективты туплауға һәләтле лидер сифаттары булған ҡыҙҙы артабан ошо уҡ мәктәптә уҡытыусы итеп алып ҡалалар. Бишенсе, алтынсы кластарҙы математиканан уҡыта, черчение, физкультура, йыр дәрестәрен алып бара. Өҫтәүенә, класс етәксеһе. Ә инде сәмле, дәртле, йәш уҡытыусы етәксе булған класс мәктәптә бөтә күрһәткестәр буйынса беренсе! Тәртипте лә ҡаты тота, хатта ҡайһы бер өлкән йәштәге уҡытыусылар, контроль эш эшләтергә булһалар, Гөлдәргә килеп шыпырт ҡына өндәшәләр: “Зинһар, дәресемә инеп ултыр әле, һин булһаң, шауламай бит улар...”

Эшләһәң, эш ҡарышмай. Быны Гөлдәр Моратова ҡара йәшенән төшөнгән. Тик бит артабан уҡыу килә, үлтереп уҡыу, баш ҡалаға барып, музыканан төплө белем алғы килә. Мәктәптә эшләү дәүерендә ул өҫ-башына ла алды. Сынъяһау уҡ булмаһа ла, колхозсының ишле ғаиләһендә үҫкән ҡыҙ бала өсөн — ярарлыҡ. Эҫенде балаларға Гөлдәр, улар ҙа уны ярата. Әле бына ул бушап ҡалған класта ултыра, парталар — буш, ләкин уға һәр береһенең артында бала күренә. Уға өмөт, ышаныс, яратыу менән ҡараған күҙҙәр. Ҡайҙалыр ул: “Китеү ул — үҙеңдең ниндәйҙер бер өлөшөңдө үлтереү”, — тигәнде уҡығайны. Ахыры, был шулай. Һыу баҫҡан ауылынан күскәндә лә кисерҙе был тойғоно Гөлдәр. Уның йәненең ниндәйҙер бер өлөшө Илтабан һыуһаҡлағысы төбөнә күмелеп ҡалғайны бит. Ҡулына китап эләкте: Рәми Ғарипов. Күҙҙәрен йомоп, тотҡан бер еренән асты: “Маҡсаттарҙың иң-иң алыҫын яҡын күрер күҙем”. Маҡсаттарҙың иң-иң алыҫын? Яҡын күрер күҙем? Быны нисек аңларға? Был бит — ишара! Алыҫ маҡсатыңды яҡынайтыр өсөн... атларға кәрәк! Туҡтамай барырға!.. Алға, бары тик алға!

### “Өфө тиһең дә ҡалаһың...”

*Юлың ни тиклем ауыр булһа,*
*юлдашың шул саҡлы ҡәҙерле.*
*Мәҡәл*

Холҡонда үҙен бәләкәйҙән һиҙҙергән лидер сифаттары йөрөткән Гөлдәр Өфө сәнғәт училищеһының хор-дирижер бүлегенә ингәс тә Өфөләге тормошон Учалы ҡыҙҙарын үҙ яйына туплауҙан башлай. Флүрә Килдейәрова, бер туған Зифа һәм Фирҙәүес Йомабаевалар һәм үҙе бер бүлмәгә урынлашалар. Гөлдәр тәртипте баштан уҡ ҡаты ҡуя: тартмаҫҡа, һүгенмәҫкә, төндә йөрөмәҫкә, дежурствоны аныҡ алып барырға, дәрес ҡалдырмаҫҡа. Ошо ҡағиҙәнән тайпылырға тырышып ҡараған ҡыҙҙар Гөлдәрҙең киҫәтеүҙәренең буш хәбәр түгел икәнен бер тапҡыр, ләкин мәңгегә төшөнә. Ояңда ни күрһәң, осҡанда — шул, тиҙәр бит. Гөлдәрҙең атаһы, ҡыҙыу холоҡло бөрйән Сабит ваҡытында ҡыҙына “тормош һабағы”н ҡаты уҡыта. Бер саҡ Гөлдәр аҙбар башында Нәзирә исемле иптәш ҡыҙы менән “шапшаҡ” уйыны уйнап ултыра. Кем “шапшаҡ” ҡала, шул һүгенә — уйындың тәртибе шулай. Ҡыҙының һүгенгәнен атаһы, Сабит, аҙбар эсендә йөрөгәнендә ишетеп ҡала һәм... Ҡыҫҡаһы, Гөлдәр аҙбар ҡыйығын тишеп, кесерткән араһына һикерә һәм шул һикереүҙән өс көн өйөнә ҡайтырға ҡурҡып йөрөй.

Өфө — баш ҡала. Матур ҡала. Ҙур ҡала. Ҙур ҡаланың талаптары ла ҙур икән шул: быны ҡыҙҙар тәүге стипендияны алғас та төшөнә. “Эш эҙләргә кәрәк, ҡыҙҙар, — ти Гөлдәр. — Төндә эшләй торған эш”. Тырышҡан таба — улар күмәкләп “Родина” кинотеатрының ҡыҙыл һәм зәңгәр залдарын йыуа башлайҙар. Залдар ҙур. Башта тамашасыларҙан ҡалған көнбағыш ҡабығы кеүек сүп-сарҙы һепереп сығаралар, аҙаҡ ултырғыс араларын мүкәйләп йөрөп йыуалар. Был эш, кинофильмдар һуң бөтөү сәбәпле, оҙаҡҡа һуҙыла. Ҡайһы саҡ төнгө өстә, ҡайһы саҡ биштә ҡайталар, өҫтәүенә, ятаҡта фортепьяно булмағанлыҡтан, таң тишегенән училищеға йүгерәләр — шунһыҙ өлгәшеп булмай. Гөлдәр, ярай, ҡара йәшенән ауырлыҡ күреп, эшкә күнегеп үҫкән, ә Флүрә, Зифа — улар бит унан йәш тә, майырығыраҡ та. Хәл юҡ: уларҙың маҡсаттарына илтер юлдарына бер кем дә асфальт йәйеп йә келәм түшәп ҡуймаған.

Ул ғаиләһендә атаһы өсөн күп ваҡыт берҙән-бер терәк, берҙән-бер таяныс та. Шуға күрә лә атаһын да йәлләй Гөлдәр. Иренең ҡыҙыу холҡонан йыш ҡына ыҙа сиккән әсәһе лә йәл уға. Саҡ ҡына буш ваҡыты булһа, Гөлдәр ҡулына баян ала. Баян йә әсәһе, йә ауылдаш апайҙары тауышы менән уфтана, һағышлана: “Өфө тиһең дә ҡалаһың, һин бер китерһең инде”, — ти гармун. Йә булмаһа: “Өфөләргә барған саҡта йәшел урмандар үтәм, һине көтәм, сабыр итәм, кәрәкмәй миңә бүтән”, — тип, йәшлеге һуҡмаҡтарына саҡыра. Эйе, эйе... Теге аҡыл эйәһе дөрөҫ әйткән: китеү ул үҙеңдең ниндәйҙер өлөшөңдө үлтереү. Ләкин шунһыҙ үҫеш тә юҡ бит! Бына улар, ауыл ҡыҙҙары, тырышып-тырмашып, юҡты бар итеп, уҡып йөрөйҙәр. Йылы түшәктән генә тороп, әсәләре әҙерләгән сәйҙәрҙе эсеп уҡырға йөрөгәндәрҙән артыҡ булмаһалар, кәм дә түгелдәр. Ә, бәлки, артыҡтыр ҙа? Улар һәр һыныҡ икмәктең, кейгән һәр кейемдәренең тир түгеп эшләп алынғанын, ҡәҙерен беләләр. Икенсенән, тормошта бары тик үҙ көсөңә ышанырға, маҡсатыңа ирешеү өсөн күпте белергә, күп түҙергә кәрәк икәнде һеңдерәләр.

*Гөлдәр Моратова, Флүрә һәм Динә Килдейәровалар*



## “Мин Балтасҡа бармайым”

*Тартҡан атты егәләр.*
*Мәҡәл*

Өфө сәнғәт училищеһының хор-дирижер бүлеген тамамлап, музыка белгесе булып ҡайтҡан Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратованы Учалыға методист итеп ебәрәләр. Эште башлап ебәреү менән үк Гөлдәр Сабит ҡыҙы ауылдарҙа музыка мәктәптәре юҡ икәненә иғтибар итә. “Беҙгә уҡыусылар ауылдарҙағы музыка мәктәптәрен тамамлап килергә тейеш!” — ти ул училище директоры Р.Х.Ҡоҙаяровҡа. Күп тә үтмәй, Учалы ауылында музыка мәктәбе астырыуға өлгәшә. Ҡоҙаяров уға: “Әйҙә, Гөлдәр Сабитовна, унда директор булып үҙең бар инде!” — ти. Ошо мәлдә Гөлдәрҙең дуҫлашып йөрөгән егете Данис Йосопов та Өфөлә мединститут тамамлай, ҡыҙға өйләнешергә тәҡдим яһай. “Мин Балтасҡа бармайым, — ти Гөлдәр. — Өйләнгең килһә, үҙең Учалыға кил!” Кейәүе артынан Балтасҡа китергә риза булмаһа ла, Учалы ауылында яңы асылған музыка мәктәбенә эшкә килергә риза була ул, тик директор түгел, ә уҡытыусы сифатында. Кейәүгә сыҡҡас, билдәле, мәшәҡәт арта, балалар тыуа, ә етәксе вазифаһы донъя мәшәҡәттәренән ирекле булыуҙы талап итә.

Музыка училищеһын тамамлап та өлгөрмәгән Наил Хафизов менән эште башлап ебәрәләр. Матди базаһы булмаған мәктәп эшен икәүләп һөйрәйҙәр улар. Ахун, Комсомол, Уральск ауылдарында мәктәптең филиалдарын асалар, кадрҙар менән тәьмин итәләр. СПТУ-ла — егеттәр, район мәҙәниәт йортонда ҡатын-ҡыҙҙар хоры ойошторалар. Әммә районның мәҙәниәте, уның шул саҡтағы торошо уйҙырма отчёттарҙан ҡоролған таяуҙарҙа ғына тора. Ҡайҙа ла — йоҙаҡ, һандар — отчет өсөн. Һәр эштең уңышы ла, уңышһыҙлығы ла кадрҙарға барып тоташа. Район мәҙәниәтен етәкләрҙәй кешене ҡайҙан табырға һуң? Бер “Ләйсән” ансамбленең даны менән генә район мәҙәниәтен күтәреп булмай бит! Район етәкселеге лә быны күптән аңлаған, тик... Әлеге лә баяғы: кеше кәрәк. “Бар ул ундай кеше, — ти ҡаланың партия комитеты бюроһына саҡырылған Любовь Баранова. — Ул Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова!” Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре профсоюзы етәксеһенең һүҙенә ҡолаҡ һалалар: Гөлдәр Сабит ҡыҙына районның мәҙәниәтен етәкләү эшен йөкмәтәләр. “Минең ике балам бар, ирем”, — тип ҡарыулашырға итә лә ул, тик: “Тартҡан атты егәләр, беҙ һинең йөктө тарта алыуыңды күреп өлгөрҙөк”, — тиҙәр.

Яҙмаларым ошо ергә еткәс, бер аҙ уйланып ултырҙым, сөнки Гөлдәрҙең артабанғы хеҙмәт биографияһы минең күҙ алдында үтте. Уның еңеүҙәренә, һөйөнөс-көйөнөстәренә күп ваҡыт үҙемә шаһит булырға тура килде. Уның инде 1977 йылда ауыҙлыҡлаған һары “Москвич” машинаһы кабинаһы күп ваҡыт беҙҙең кәңәшмә үткәрер кабинетҡа әйләнер ине. Йәшлек дәрте ташып торған, бөтә нәмәне төптән уйлап, алдан күреп фекер йөрөткән Гөлдәр ҡорған пландарын асып һала, кәңәшләшә, улар хаҡында фекер ишеткеһе килә ине. Был осраҡта ла ул эште кадрҙар проблемаһын хәл итеүҙән башланы: ете кеше, шул иҫәптән үҙе лә Силәбе мәҙәниәт институтына ситтән тороп уҡырға инде, ун ете кешене Стәрлетамаҡ культура-ағартыу училищеһына алып барҙы (ун икеһе уҡырға инеп ҡайтты). Гөлдәр Сабит ҡыҙы киләсәктә лә, ҡайҙа ғына, ниндәй генә вазифа биләмәһен, кадрҙар менән күберәк шулай эш итте: кешеләрҙең квалификацияһын күтәреү, коллективта эш процесын яҡшыраҡ көйләү юлдарын эҙләне, ә кадрҙарҙы ҡыҫҡартыу, алмаштырыуҙан ситләшергә тырышты.

Район Мәҙәниәт һарайының йоҙағын ватып инеп, ремонт яһата башланы. Унығ өсөн аҡса табыу ҙа еңел булманы, мәгәр йырып сыҡты. Ҡасандыр Имашевтар башлаған халыҡ театрын тергеҙер өсөн Стәрлетамаҡтан режиссер алып килде, уға фатир юллап, Учалы ҡалаһына күсерҙе. Римма Шаһивәли ҡыҙы Вәлиева элекке театрҙың данын ҡайтарҙы — театр һөйөүселәр был башланғысты дәррәү күтәреп алды! Әлбиттә, Гөлдәр Сабит ҡыҙының башында тыуған һәр идеяны етәкселәр хуплап ҡаршы алдылар, тип тә булмай. Мәҫәлән, районда халыҡ театрын тергеҙергә булғас:

— Ул нимәгә?! — тип ҡырҡа ҡаршы ла төштөләр.

— Кәрәк! Беҙҙең район халҡы театр ярата. Сибай, Өфө алыҫ!..

Хәтеремдә, шул йылдарҙа мәшһүр “Ләйсән” бейеү ансамбле лә “урамда” тороп ҡалды: баянист, балетмейстер штат расписаниеһында ҡаралмаған. Гөлдәр Сабит ҡыҙы ул саҡтағы район Советы председателе урынбаҫары Нурат Вәис ҡыҙы Даутова менән һөйләшеп, уларҙы хөкүмәт түләүенә күсерттерҙе. Бөтә районға бер “Ләйсән” етмәй, тип, район Мәҙәниәт һарайында “Сулпан” бейеү ансамблен булдырҙы. Етәкселәре итеп Зариф Ғарипов менән Маиза Буләкованы саҡырҙы. “Ләйсән”гә лә, “Сулпан”ға ла әҙерлекле бейеүсе-алмаш әҙерләргә кәрәк ине. Гөлдәр Сабит ҡыҙы Өфөнән Зөлфиә Кирәева, Рәис Баишевты саҡырып алып ҡайтты һәм Сәфәр ауылында “Ирәмәл” балалар бейеү ансамбле үҫеп сыҡты, етәксеһе Наил Баишев булған был коллектив юғары профессиональ бейеү коллективына әйләнде. Ошо осорҙа район агитбригадаһы эше лә уғата йәнләнде. Агитбригадалағы рух күтәренкелеген сағыштырып булһа, 30—40-сы йылдарҙағы агитмасса эше күтәренкелеге менән генә сағыштырып булалыр. Агитбригада республикала беренсе урынды яуланы һәм автоклуб менән бүләкләнде; Учалы һәүәҫкәр артистары республикала шаулап үткән “Тальян” фестивалендә бер түгел, ике тапҡыр беренсе урынды яуланы; Учалы ауылында тәү тапҡыр типовой китапхана төҙөлдө.

Гөлдәр Сабит ҡыҙы Учалы районы мәҙәниәтен етәкләгән йылдарҙа районда һәм ауылдарҙа халҡыбыҙҙың “Ҡарға бутҡаһы”, “Кәкүк сәйе” кеүек йола байрамдары үтә башланы. Гөлдәр Моратованың үҙен фольклор түңәрәктәренә йөрөгән оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙары менән Өфө түгел, Мәскәү сәхнәләрендә осратыу ҙа ғәҙәти күренешкә әйләнде. Ошо эштәр солғанышында йәшәгән Гөлдәрҙе,

*Гөлдәр Сабит ҡыҙы Светлана Хәкимова, Таңсулпан Ғарипова һәм Рәзифә Динмөхәмәтова менән*



әлбиттә, бер кем дә әсәлек бурысын үтәүҙән азат ҡылып ҡуйманы. Эште яйға һалыр өсөн башлап ебәреү генә етмәй бит — үҙеңә даими рәүештә күҙ-колаҡ булыу кәрәк. Репетиция бара. Гөлдәр Сабитовна бергә ҡайнай, улы, бәләкәй Мораты, ултырғыста әсәһенең тунын ябынып йоҡлай — күптәр өсөн был ғәҙәти күренеш ине. Унан тыш, инде олоғая башлаған әсәһе Хәсбиямал менән атаһы Сабиттың күҙ терәп торған таянысы ла Гөлдәр булып ҡалды: бесәнде улар саба, утын килтереү, бәрәңге баҡсаһын тәрбиәләү — бөтәһе лә улар елкәһендә. Сабит ҡарт та хәҙер тормошон Гөлдәрһеҙ күҙ алдына килтерә алмай, ҡустылары, һеңлеләре яҙмышының да хәл иткес ваҡыттарында Гөлдәр ярҙамға килә...

Уҙған быуаттың 90-сы йылдары халҡыбыҙ яҙмышында дөйөм күтәрелеш мәле булып иҫтә ҡалды: мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытыла башланы, балалар баҡсалары ла милли программа менән эшләүгә күсте, филармониялар асылды, башҡорт телендә район гәзиттәре сыға, халыҡ үҙенең милли һәм мәҙәни тамырҙарын байҡай. Беҙ ҙә, Учалы районы һәм ҡалаһында әллә ҡасандан хәл ителеүҙе көткән байтаҡ проблемаларҙы күтәреп сығып, арыуыҡ уңышҡа өлгәшкән башҡорт зыялылары, Мәҙәниәт министрлығына килеп, Учалы ҡалаһындағы сәнғәт училищеһының милли кадрҙар әҙерләү усағына әйләнеүен һораныҡ. Юғиһә, уҡып сығалар, үҙҙәренең “Ҡарабай”ҙы уйнап күрһәтерлек хәле юҡ.

Ошо мәлдә музыка училищеһы директоры Юрий Ҡолодкин да, Гөлдәр Моратова ла ауыл мәҙәниәт йорттары өсөн кадрҙар әҙерләү мәсьәләһе хаҡында һөйләшеүҙәр алып бара. Әйҙә, ул фольклор бүлеге булһын, тик унан ауыл мәҙәниәтен, халыҡтың ихтыяжын аңлаған һәм эшкә һәләтле кадрҙар уҡып сыҡһын. “Асығыҙ, — ти Гөлдәр Сабит ҡыҙы. — Асығыҙ, эшкә киләм!” “Бир бишеңде!” — ти Юрий Ҡолодкин. Һәр хәлдә беҙ: мин, Сәлимйән Бәҙретдинов, Мәүлит Ямалетдинов, Өфөнән ҡайтҡанда, Гөлдәр асыласаҡ фольклор бүлеген етәкләргә ризалыҡ биргән була.

Тәүге тәжрибә ине был. Студенттарҙы уҡытыр өсөн кластар, йәшәтер өсөн ятаҡ кәрәк. Етмәһә, вокал һәм хореография бүлектәре булыу мотлаҡ — бүлек ауыл клубтарын белгестәр менән тәьмин итергә тейеш бит! Ул ваҡытта минең яңы

*Гүзәл Ситдиҡова, Юнир Һағынбаев, Альмира Шәрипова һәм Илүзә Шәйәхмәтова менән юлдағы “репетиция”*



барлыҡҡа килеп, башҡорт телендә сыға башлаған “Яйыҡ” гәзитендә мөхәррир урынбаҫары булып эшләп йөрөгән сағым ине. Эш муйындан. Гөлдәр Моратова етәкләгән фольклор бүлеге музыка училищеһы ятағының ике бүлмәһен класс итеп, эш башланы. Тәү тапҡыр фольклор бүлегенә алынған 12 студент шул ятаҡта йәшәй ҙә. Уҡыш йыйыу осоро — журналистар өсөн дә бик тынғыһыҙ ваҡыт. Октябрь башы. Улы Моратын эйәртеп, Гөлдәр килеп инде өйгә. Башлыса, ул ҡабалан йөрөй. Күберәк миңә берәй сараға сценарий яҙҙырыу өсөн килә. Был юлы ул ашыҡмағанға оҡшай — аптырай төштөм. Сәй эсеп, дөйөм хәл-әхүәл хаҡында хәбәрләшеп алғас, Гөлдәр төптән һүҙ башланы: фольклор бүлеге, перспективаһы, проблемалар. Хатта һүҙ аҙаҡ Учалы ҡалаһында Мәҙәниәт институты асыу хаҡындағы хыялдарға олғашты.

— База табырға була. Ана, төҙөлөш тресының элекке бинаһы буш тора, — ти Гөлдәр. — Эштең төп уңышы — кадрҙар. Ҡыҫҡаһы, Таңсулпан апай, һин беҙгә эшкә күс. Әҙәбиәттән, халыҡтың ауыҙ-тел ижадынан, этнографияһынан, ғәрәп яҙмаһынан, “Ислам нигеҙҙәре”нән, сәхнә телмәренән уҡытырһың.

— Ә гәзит? “Яйыҡ” бит — минең балам! Уны нисек ташлайым, ти, мин?! Баш мөхәррир элек гәзит эшендә эшләмәгән кеше. Ул бит тотошлайы менән тиерлек минең елкәлә!

— Аңлайым. “Яйыҡ”ты ла, һине лә аңлайым. Ләкин бит... Фольклор бүлеге бөтә республика өсөн кадрҙар әҙерләйәсәк!

— Һин унда былай ҙа сағыу-сағыу таланттарҙы уҡытырға йыйғанһың: Фәрзәнә Фәтҡуллина, Зифа Вәлиева — республикала билдәле йырсылар, Маиза Бүләкова — бер тигән бейеүсе, Фәрит Зәйнуллин — юғары белемле музыкант, Рәмил Ғимранов — йырсы, композитор, музыка белгесе, Әнфәр Хужин — йырсы, музыка белгесе, баянсы, Зөлхизә һәм Ринат Ҡолбәйетовтар — юғары белемле хореографтар, Айбулат Дәүләтбаев — юғары белемле музыкант, ҡурайсы!

— Уныһы — шулай. Беҙгә педагог кәрәк! Уларҙың береһенең дә балалар менән эшләп ҡарағаны юҡ. Беҙгә балалар бөтә республиканан килә. Икенсенән, кем тағы әле мин һанаған фәндәрҙең бөтәһенән бер үҙе уҡыта ала?

Тимер логика. Был — Гөлдәр. Шулай ҙа мин был юлы ҡаты торҙом. “Мин бит яҙыусы, ижадҡа бөтөнләй ваҡытым ҡалмаясаҡ”, — тип серәштем. Әңгәмә таңғы дүрттә, Гөлдәрҙең еңеүе менән тамамланды. Тормош иптәшем Хәйҙәр күптән инде татлы төштәр күреп йоҡлаған Моратты күтәреп, машинаға һалды. Мин әлегә “Яйыҡ”та ла, сәғәт 5-ән һуң фольклор бүлегендә эшләү шарты менән ризалыҡ биреп тороп ҡалдым.

Фольклор бүлегендә Гөлдәр Моратова менән иңгә-иң терәп дүрт йыл бергә эшләү дәүерендә мин уның етәксе, кеше булараҡ яңынан-яңы һыҙаттарын астым. Талапсан, ләкин уҫал түгел, принципиаль, ләкин игелекле. Әлбиттә, ул коллективҡа сағыу талант эйәләрен туплаған. Ләкин һәр береһе — үҙенсәлекле характер эйәһе. Уларҙың һәр береһе үҙенең холҡон күрһәтә башлаһа — түҙ генә! Ә Гөлдәр түҙҙе. Береһенә бер тауыш күтәрмәне. Бик күбеһен фатирлы, маҡтаулы исемле итте. Шул уҡ кешеләр ҡайһы саҡ аш менән атҡанға таш та яуҙырҙы — кенә һаҡламаны, үс алманы. Дөйөм эш, яҡты маҡсаттар хаҡына, ауыҙы тулы ҡан булһа ла, төкөрмәне, тышҡа сығарманы. Үҙенә өндәшмәһәм дә: “Ҡайҙан килә икән уға быңдай сабырлыҡ?!” — тип аптыраған саҡтарым аҙ булманы. Миңә ҡалһа, ул үҙендәге бөтә көс-ҡеүәтте кеше менән мөнәсәбәт асыҡлауға түгел, ә бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып, үҙе тотонған эште, кадрҙарҙы профессиональ юғарылыҡҡа күтәреү өсөн ҡулланды. Шулай булмаһа, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бүлек ятаҡтан махсус ремонт-реконструкция

үткән бинаға күсер инеме лә, шул хәтлем йыһаз, техника, костюмдар менән тәьмин ителер инеме? Фольклор бүлегенең йөҙөк ҡашы — “Ҡойон” ансамбле ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә хатта республика исеменән сит илдәрҙә сығыш яһап йөрөнө! Хатта ки 1995 йылда Өфөлә үткән Бөтә донъя башҡорттарының I Ҡоролтайы ла беҙҙең фольклор бүлеге студенттары сығышы менән башланды һәм тамамланды. Иманым камил: әгәр ҙә Гөлдәр Моратованы Өфөгә алмаһалар, Учалы ҡалаһында Мәҙәниәт институты күптән асылған һәм үҙ емештәрен биргән булыр ине. Ләкин, 1995 йылдың май айында, Бөтә донъя башҡорттарының Беренсе Ҡоролтайы үтер алдынан, уны баш ҡалаға саҡырып алдылар. Был хәбәр, хәтеремдә, бөтәбеҙгә лә аяҙ көндө йәшен atҡандай тәьҫир итте: шаңҡып ҡалдыҡ.

Оҙатыу мәжлесенә Гөлдәр Сабит ҡыҙы атаһы һәм әсәһе менән килде. Ҡыҙы адресына әйтелгән маҡтау һүҙҙәрен Сабит ҡарт үҙ ҡолаҡтары менән ишетеп ултырҙы. “Эх, — мин әйтәм, — көлтә башлы, зәңгәрһыу күҙле ҡыҙыҡайҙан ошо саҡлы шәхес үҫеп сығырын белгән булһа, Сабит ағай йәшлектәге теге хаталарын ҡылмаған булыр ине лә бит! Тик, нишләйһең, хаталар ҙа, хаталар өсөн язалар ҙа бәндәнең үҙе менән ҡала. Гөлдәр үҙе иһә уларҙы күптән кисергәндер — уның күңелендә кер ятырлыҡ ер юҡ”.

Алғараҡ китеп, шуны әйтә алам: беҙҙең хыялдан яралып, аҙаҡ ысынбарлыҡҡа әйләнгән фольклор бүлеге йәшәй — уны беҙҙең тәүге сығарылыш уҡыусыларыбыҙ етәкләй.

## “Беҙ һине Учалыла ултырыр өсөн үҫтерմәнек!”

*Тормошта үҙеңә ике маҡсат ҡуйыу хәйерле.*
*Беренсеһе — нимәгә ынтылаһың,*
*шуға өлгәшергә тырышыу;*
*икенсеһе — өлгәшкәндәреңә шатлана белеү.*
*Ләкин кешелектең иң алдынғы өлөшө генә*
*икенсе маҡсатына ирешеүгә һәләтле.*
*Логан Пирсолл Смит*

Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова үҙен Өфөгә Мәҙәниәт министры урынбаҫары вазифаһына эшкә саҡырыуҙары хаҡындағы яңылыҡты башта Учалы район Советы рәйесе урынбаҫары, аналитик фекерләү маһиры, эшлекле Нурат Вәис ҡыҙы Даутова менән бүлешә. “Ҡитәһең инде, — ти уның кумиры Нурат Вәис ҡыҙы. — Беҙ һине Учалыла ултырыр өсөн үҫтермәнек!” Башта Гөлдәр Сабит ҡыҙы китапханалар, музейҙар, халыҡ ижады коллективтары эше өсөн яуаплы урынбаҫар була. Был өлкә кадрҙар менән танышыу, республикала интеллектуаль базаны тәшкил иткән объекттарҙың торошон яҡындан өйрәнеү һәм белеү өсөн бик мөһим була. Хәтеремдә (мин ул саҡта Сибай ҡалаһында муниципаль телевидениела эшләй инем) “Ирәндек моңдары”на килгән Гөлдәр Сабит ҡыҙын Сибай сәнғәт училищеһына алып киттем. Маҡсатым — бындағы проблемаларҙы үҙ күҙе менән күреп китһен. Барғас, мин шуға аптыраным: министр урынбаҫары, ошонда күптән эшләп йөрөгән кешеләй, ҡайҙа ниндәй иғтибар кәрәк икәнде шартлатып үҙе һанап сыҡты. Бында ул әллә биш, әллә алты минут булды — мәгәр уға бөтәһе лә көн кеүек асыҡ ине! Бына, исмаһам, профессионализм!

Мәҙәниәт министры итеп тәғәйенләнгәс, Тәлғәт Ниғмәтулла улы Сәғитов Моратованы 1-се урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләй. Гөлдәр Сабит ҡыҙы башкөллө эшкә сума. 2000 йылда мин дә Өфөгә күстем. Драматургия менән шөғөлләнеүем

арҡаһында, беҙҙең юлдар Гөлдәр менән тағы параллель рәүештә китте. Һәр хәлдә, мин уны йышыраҡ күрә, аралаша башланым. Гөлдәр әле ул саҡтарҙа бик йәш, сибәр, һомғол. Ҡайҙа барма, уға ҡарата һоҡланыу тулы ҡараштарҙы күрергә, уның адресына төбәлгән комплименттарҙы ишетергә тура килә ине. Тик ул һәр саҡ үҙе булып ҡалды, һауаланманы: "Мин бит, Таңсулпан апай, көтөү көткән кеше", — тигәне хәтеремдә. "Көтөүсе булмағайың... Түрә булғас, сабатаһын түргә элгәндәрҙе лә аҙ күрелмәне", — тип яуаплағаным хәтеремдә. Хәйер, Гөлдәр Сабит ҡыҙының үҙ шәхсиәте менән һоҡланып йәшәргә ваҡыты ла булманы: яуаплы эш, өйҙә — ир, балалар. Бер үҙенең бишкә түгел, ҡырҡҡа ярылырҙай саҡтары була торғайны. Мәгәр зарланманы, уға еңел түгел икәнен ҡайһы саҡ күҙҙәре генә һиҙҙерә ине, һәм ҡаштары араһына ятҡан тәрән һырҙары...

Шулай ҙа мин уның илағанын бер тапҡыр күрҙем. Ҡис менән мин йәшәгән дөйөм ятаҡҡа килеп инде Гөлдәр.

— Апай, мине Башҡорт академия драма театрына генераль директор итеп тәғәйенләнеләр!

— Атаҡ, министрлыҡтан... сығарҙылармы?

— Юҡ, икеһен бергә алып барасаҡһың, тинеләр.

— Был ҡайһылай була? — тип шаҡ ҡаттым мин дә. — Бер муйынға ике ҡамыт кейҙерәләр тиме?

— Шулай булып сыға шул: ике ҡамыт.

Икәүләп илаштыҡ. "Бирешмә, — тигән булдым. — Үҙеңде һаҡла!" Әйтһәм дә, эсемдән уйлайым: "Быға тиклем үҙен һаҡлауҙың ни икәнен дә белмәгән Гөлдәр ҡайҙан һаҡланһын инде..."

Гөлдәр Сабит ҡыҙына тәҡдим ителгән был яңы "ҡамыт" хаҡында уйланып, мин ул саҡта шундайыраҡ параллель үткәрҙем. Элек, Совет заманында, магазинға берәй йүнле нәмә килһә, билдәле, алғың килә, ләкин уны алырға теләһәң, берәй үтмәгән тауарҙы ҡушып бирәләр. "Академия драма театрының

*Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Мостай Кәримдең юбилей кисәһендә*



генераль директоры” вазифаһы ҡамыты ана шундайыраҡ үтмәгән тауар сифатында бирелде уға, етмәһә, түләүһеҙ. Бушҡа. Ни өсөнмө? Шуға: янғындан һуң театр күрекле итеп ремонтланһа ла — ҡыйығы аға, сөнки ул ҡаты Урал тәбиғәтенә яраҡлаштырылмай ябылған була. Ошоноң кеүек етешһеҙлектәр бик күп була реконструкция үткән театр бинаһында. Икенсенән. Яҡтыртыу, тауыш ҡорамалдары етешмәй, транспорт юҡ хәлендә, артистарҙың, театр хеҙмәткәрҙәренең көнкүреше лә даими хәстәрлек талап итә. Мин был проблемаларҙы Гөлдәрҙең үҙ ауыҙынан ишеттем һәм үҙемсә һығымта яһаным: ике йәш ярымлыҡ сағында ҡамыт бауын ауыҙынан ысҡындырмай сәғәттән ашыу тешләп торорға көс тапҡан Гөлдәр был юлы ла һынатмаҫ. Шулай булды ла: Гөлдәр Моратова эште артистарға эш хаҡы арттырыуға өлгәшеүҙән, гастролдәргә йөрөргә уңайлы “Икарус” автобусы алыуҙан башланы. Яңы “Газель” дә алды. Спектаклдәр ҡуйырға режиссерҙарҙы, үҙебеҙҙә булмау сәбәпле, ситтән саҡырҙылар. Унан тыш, ҡасандыр ГИТИС тамамлап, көслө ағым булып килеп инеп, театрға яңы һулыш өргән артистар ҙа олоғайыу өҫтөндә. Яңы дәрт, яңы, заманса фекер йөрөткән йәштәр кәрәк театрға! Гөлдәр Сабит ҡыҙы, театрҙың ул саҡтағы художество етәксеһе Хөрмәт Үтәшев менән кәңәшләшеп, Мәскәүгә башҡорт төркөмөн уҡытырға ебәрә. Хәҙер, ана, щепкинсылар Башҡорт академия драма театрының төп көсөнә әйләнде! Һәм бөтә был эштәр (бөтәһен дә һанап сығыу мөмкин дә түгел) мәҙәниәт министрының 1-се урынбаҫары вазифаһынан талап ителгән эштәргә тамсы ла хилаф ҡылынмайынса башҡарыла. Ошо йылдарҙа театр Рәсәй буйлап гастролдәргә сыға башлай. Ошо йылдарҙа Фәйзи Ғәскәров исемендәге бейеү ансамбле “академик ансамбль” исемен алыуға өлгәшә, һәм был статус артистарҙың эш хаҡын арттырыуға мөмкинлек бирә.

Әҙәм балаһының йәшәү рәүеше, характеры, темпераменты төрлөсә булған кеүек, уның биологик йәше лә төрлөсә. Ҡайһы берәүҙәрҙең биологик йәше уның физик торошона тап килмәй. Ҡуктәрҙе дер һелкеткән йәшендәй йәшнәгән

*Ейәндәре Айнур, Данил һәм Айҙар менән Торатау янында*



саҡтарында Гөлдәр Моратованың пенсияға йәше етте. Шул тиклем тәжрибә, кадрҙарҙы белеү, дәрт-дарман, белем һәм... һин китергә тейеш. Уйлап ҡараһаң, исемдәре донъяға билдәле сәйәсмәндәр, мәҫәлән, Англия премьер-министры Уинстон Черчилль уның йәшендә үҙенең карьераһын яһай башлай ғына.

Пенсияға сыҡҡас, Гөлдәр Моратова биш ай ял итә, унан Наил Ғәйетбай тәҡдиме менән Республика милли әҙәбиәт музейына директор булып килә. Тынғыһыҙ Моратова бында ла эште төрлө яҡлап төрләндереп алып бара. Музей хәҙер даими рәүештә күсмә күргәҙмәләр ойоштора, яҙыусыларҙың юбилейҙарын үткәрә, фонды тулылана — бөтәһе 10 меңдән ашыу экспонат иҫәпләнә. Ырымбур, Һамар, Силәбе кеүек тарихи башҡорт ерҙәрендә барлыҡҡа килгән өлкәләргә экспедициялар ойоштора. 2015 йылды “Әҙәбиәт йылы” тип иғлан итеү менән, Гөлдәр Сабит ҡыҙы, Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана директоры Айгөл Динислам ҡыҙы Моратова менән кәңәшләшеп, Башҡортостан яҙыусылар берлеге рәйесе Наил Әсҡәт улы Ғәйетбаевҡа республиканың район һәм ҡалалары буйлап әҙәби марафон ойошторoccoу тәҡдиме менән мөрәжәғәт иттеләр. Марафон Башҡортостандың 63 район һәм ҡалаһы буйлап “Әҙәбиәт йылы” рамкаһында ҡыҙыл еп булып үтте һәм китаптың, әҙип һүҙенең бөгөнгө көндәге ҡиммәтен, бәҫен иҫбатланы.

Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова бөгөн дә юлда. Бала сағында көтөү ҡыуып ҡайтҡан сағында барған юлын: “Мин ҡалдырған эҙ — ул ниндәй?” — тип барлаған булһа, ул үткән юл хәҙер инде байтаҡҡа һыҙылған. Ҡайҙалыр туҡтаған, йә боролоп үткән миҙгелдәре лә барҙыр. Үҙенең оло тормош һәм хеҙмәт юлында Гөлдәр Сабит ҡыҙы үҙенә ғүмерлек тоғро дуҫтар таба; улар: Раушания Байғужина, Флүрә Ҡилдейәрова, Сажиҙә Ишмөхәмәтова, Сәлиә Мырҙабаева, Тәнзилә Үҙәнбаева... Ошо дәүер эсендә ул ғәзиз әсәһе, атаһы менән мәңгегә хушлашты. Әсәһе Хәсбиямал менән хушлашырға килгән халыҡтың күплегенә иҫе китте Гөлдәрҙең. “Бәхил бул, Хәсбиямал, гүрең яҡты булһын. Һуғыш йылдарында һин беҙҙе асығып, шешенеп үлеүҙән алып ҡалдың!” — тине күптәре. Изгелек онотолмай. Гөлдәр Моратованың Учалы ҡалаһында үткән юбилей кисәһенә халыҡ ағылып килде, ул тотош халыҡ байрамына әүерелде, сәскәләр, рәхмәт һүҙҙәре туғыҙынсы тулҡынды хәтерләтте. Бөтәһе лә, күҙҙәренә йәш алып, уның ҡылған изгелектәрен һөйләп ҡалырға ашыҡты. Гөлдәр үҙе лә бит тормош юлында осраған күптәр өсөн Хыҙыр Ильяс булды.

Гөлдәр Сабит ҡыҙы ҡайһы саҡ, ҡулына баянын алып, “Ҡарт Урал”ды һуҙа:

Ғәзиз балаларын ҡосағына йыйған
Әсәләрҙең ҡуйыны шикелле...

Мин уның үҙен дә шул саҡта Урал тауҙарына оҡшатам: күпме кеше уның йылыһына һыйынды, унан көс-дәрт алды, рухына ныҡлыҡ, йәненә тыныслыҡ тапты.

Яҙмаларымдың һуңғы бүлегенә эпиграф итеп мин аҡыл эйәһе Логан Пирсолл Смиттың әйткән һүҙҙәрен бушҡа алманым. Ул кешегә тормошонда ике маҡсат ҡуйырға кәңәш итә бит. Тәүгеһенә — нимәгә ынтылған булһа, шуға Гөлдәр Моратова өлгәште. Уныһы хаҡ. Икенсеһе — өлгәшкәндәреңә шатлана белеү. Маҡсаттың быныһына, үкенескә ҡаршы, бик һирәктәр өлгәшә икән. Ләкин миндә Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова маҡсатының был өлөшөнә лә өлгәшкәндер тигән өмөт бар: кешеләргә бәхетте тик бәхетлеләр генә өләшә ала. Ә Гөлдәр иҫ китмәле бәхетле кеше, тормошо, йәшәүе менән яҡты эҙ ҡалдырыусы шәхес.